Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа
им.Ф.Х.Мужавирова с.Алькино
муниципального района
Салаватский район
Республики Башкортостан

| РАССМОТРЕНО: | « СОГЛАСОВАНО» | «УТВЕРЖДАЮ» |
|---|---|---|
| на заседании ШМО | Заместитель директора по УВР | и.о. директора школы: |
| «27 » 08.2025 г. | Закирова Л.Ф ______ | Камалетдинова М.Ф ______ |
| Протокол № 1 | «27»08.2025 г. | Приказ № 253 |
| Руководитель ШМО ______ | Педсовет №1 | от 28.08.2025 г. |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА ВНЕУРОЧНОЙ ДЕЯТЕЛЬНОСТИ

## Башкирская литература

## 8-9 классы

Дәрестән тыш эшмәкәрлек буйынса эш программаһы дөйөм белем биреү буйынса дәүләт федераль стандарттары талаптарынан сығып төҙөлдө.

Мәктәптәрҙә региональ компонент сәғәттәре юҡҡа сыға бара, әммә Башҡортостан мәҙәниәтен, башҡорт телен дәрестән тыш эшмәкәрлек иҫәбенән өйрәнеү мөмкинселеге бар. Әлеге көндә, региональ компонентты иҫәпкә алып эшләнгән, дәрестән тыш эшмәкәрлеккә арналған программалар юҡ, шуға күрә был хеҙмәтте кәрәкле тип таптыҡ.

Уҡыусыларҙың дәрестән тыш эшмәкәрлеге көндөң икенсе яртыһында үткәрелә. Кластан тыш эш 8 -9 кластар өсөн эшләнгән төп белем биреү программалары рамкаһында ойошторола, йәш үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып эшләнгән.

Беҙ бик ҡатмарлы һәм мауыҡтырғыс донъяла йәшәйбеҙ, шул уҡ ваҡытта кешелек донъяһы күп яҡлы, берҙәм булырға тейеш. Тыуған илдең, рухи-әхләҡи байлыҡтарына таянмайынса беҙ патриот һәм лайыҡлы граждандар тәрбиәләй алмаясаҡбыҙ.

Йолаларҙы, тарихты, рухи мәҙәниәтте йөрәк һәм күңел менән ҡабул итеү ғаилә, туғандар, мәктәп аша килә. Ошо саҡта ғына “атай йорто”, “тыуған ер”, “минең ғаиләм һәм туғандарым”, “Атайсал” төшөнсәһе баланың аңына кесе йәштән үк кереп ҡала,ә үҫә килә уның граждanлыҡ үҙаңы, патриотизмы аныҡлана. Рәсәй мәҙәниәтен ағастың ҙур олоно менән сағыштырып була, ә тамырҙары - башҡорт һәм шундай уҡ башҡа халыҡтарҙың мәҙәниәте.

**Эшмәкәрлектең дөйөм йөкмәткеһе**

Хәҙерге заманда йәштәрҙе әхләҡи, патриотик тәрбиәләү, уларҙың рухи байлығын үҫтереү башҡорт халҡының төп бурысы булып тора. Халыҡтың бай тарихында быуындарҙың бәйләнеше, халыҡ батырҙары, сәсәндәре, күренекле ғалимдары - быны киләсәк быуын белергә, танырға тейеш.

Милли холоҡтоң һәйбәт сифаты: үҙ халҡыңдың тарихына һәм традицияларына ихтирам, Тыуған илгә, тыуған ергә һөйөү, әхләҡлелек,

баҫалҡылыҡ, тыумыштан килгән матур тойғолар, яҡшылылыҡҡа ынтылыштар былар бөтәһе лә халыҡ оҫталарының ижады.

Илдең иртәгәһе киләсәк быуындың ниндәй булыуынан килә, лайыҡлы граждандар булып өсөн Тыуған илен һүҙҙә генә түгел, ә эше менән яратыусы, үҙ тарихын, милли мәҙәниәтен, халыҡ традицияларын һаҡлаусы һәм үҫтереүсе булыу кәрәк. Башҡорт тарихының үткәне ҡатмарлы, шуға ҡарамаҫтан мәҙәниәте бай, рухы көслө. Тарихтың көтөлмәгән үҙгәрештәре, ауыр һынауҙары башҡорт халҡының намыҫын төшөрә алмаған. Халыҡтың үткәне бөйөк , киләсәге лә бөйөк булырға тейеш.

Баланы тәрбиәләгәндә халыҡтың сәнғәт, ижад сығанаҡтарына мөрәжәғәт итеүҙе заман талап итә. Башҡорт халҡының бай һәм үҙенсәлекле күңел торошо фольклорҙың бөтә жанрҙарында асыла. Ҡабатланмаҫ халыҡ ижадын һаҡлау, яҡлау, уның традицияларын үҫтереү – уҡытыусыларҙың, сәнғәт әһелдәренең изге бурысы. .

Дәрестән тыш эшмәкәрлек уҡыусыларҙың белемен киңәйтә, дәрестә үтелгәндәрҙе телмәр практикаһы ситуацияһында ҡабатларға ярҙам итә, башҡорт теленә мөхәббәт уята, уны өйрәнергә ҡыҙыҡһыныуын арттыра. Дәрестә тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү технологияһы алымдарын ҡулланып балаларҙың фекерләү ҡеүәһен үҫтереү, үҙаллылыҡ тәрбиәләү, иң мөһиме — баланы дөрөҫ һорау ҡуйырға һәм уға яуап бирергә өйрәтеү. Уҡыусылар сағыштырырға, анализларға, планлаштырырға, маҡсат ҡуйып, уны хәл итеү юлдарын табырға өйрәнәләр. Алған белемдәрен телмәр практикаһында ҡулланырға йыйылыштарҙа, үҙ иптәштәре алдында сығыш яһау, тасуири һөйләү, яҙыу күнекмәләрен нығытыу.

Программаның **маҡсаты:** уҡыусыларҙы башҡорт халҡының мираҫы булған халыҡ, яҙыусылар ижады менән яҡынданыраҡ таныштырыу, үҙҙәренең фекерен телдән һәм яҙма рәүештә аңлата, тормошта практик файҙаланырға өйрәтеү; башҡортса һөйләгәнде, уҡығанды, ишеткәнде аңлау күнекмәләре булдырыу.

Маҡсаттан сығып түбәндәге **бурыстар** ҡуйылды:

- телмәр компетентлылығын үҫтереү, фекереңде еткерә белеү;
- уҡыусыларҙың дәрестәрҙә үҙләштергән белемдәрен дәрестән тыш эшмәкәрлектә нығытыу, тәрәнәйтеү һәм тормошта ҡулланырға күнектереү;
- төрлө ситуацияларҙа уҡыусыларҙы үҙ-ара башҡортса аралашыу;
- әҙәбиәт һәм сәнғәт аша уҡыусыларҙың танып белеү, ижади һәләттәрен үҫтереү;
- уҡыусыларҙа башҡорт телен, йолаларын, мәҙәниәтен, тарихын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу;
- гражданлыҡ үҙаң һәм патриотизм тойғоһон формалаштырыу; - уҡыусыларҙы рухи һәм әхлаҡи яҡтан тәрбиәләү.

“Башҡорт фольклоры” программаһының **принциптары**:

- телде коммуникатив нигеҙҙә өйрәнеү;
- баланың үҫеше өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу;
- дәрестән тыш эшмәкәрлектең туған башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәре менән үҙ-ара тығыҙ мөнәсәбәттә булыуы;
- дәрестән тыш эшмәкәрлектә предмет-ара бәйләнеш булыуы;
- фәннилек һәм системалылыҡ, дауамлылыҡ, күсәгилешлелек принциптары;
- баланың психик һәм физик һаулығын һаҡлау.

**Шәхси, предмет-ара һәм предмет һөҙөмтәләре**

«Халыҡ ижады ынйылары » дәрестән тыш эшмәкәрлектең программаһын үҙләштереү аша федераль дәүләт белем биреү стандарттарына тап килгән түбәндәге *һөҙөмтәләр* формалаша:

## Планлаштырылған һөҙөмтәләр.

Эшләнгән эштәрҙе, эшмәкәрлек һөҙөмтәләрен барлау, эш сифатын контролләү, баһалау. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ итеп һөйләргә, уҡығанды аңларға өйрәтеү, телмәр үҫтереү.

Башҡорт теленә, әҙәбиәтенә, мәҙәниәтенә ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.

- ғилми-ғәмәли конференцияларҙа ҡатнашыу;
- проекттар, презентациялар, стена гәзиттәре, видеосюжеттар эшләү;
- инша, шиғыр яҙыу;

**Шәхси һөҙөмтәләр.**

1. Башҡорт йолаларын, мәҙәниәтен, тарихын үҙләштереү һәм ҡабул итеү;

Үҙ белемеңде арттырыу һәм эшмәкәрлегеңде ойоштора алыу оҫталығын формалаштырыу.

2. Йәмәғәт, тикшеренеү, ижади һәм башҡа төр эшмәкәрлек барышында аралаша белеү оҫталғын үҫтереү.
3. Уҡыусыларҙа граждандлыҡ тойғоһо, башҡа халыҡтарға ҡарата ихтирам формалаштырыу.
4. Туған телде һаҡлау, телмәр мәҙәниәтен камиллаштырыу.
5. Һаулыҡты нығытыу, әхлаҡ ҡағиҙәләрен белеү, уларҙы үтәүҙең мөһимлеген аңлатыу.
6. Тыуған ил, туған тел матурлығын, күркәмлеген тоя белеү, уларҙы һаҡлау, үҙ халҡының традицияларын, йолаларын өйрәнеү, таратыу.

**Метапредмет һөҙөмтәләре.**

1. Уҡыу процесына яуаплы ҡарау, маҡсат ҡуйыу, эште планлаштыра белеү, уҡыу мәсьәләләрен сисә белеү.
2. Теге йәки был тема буйынса кәрәкле мәғлүмәт туплау, эҙләнеү эше алып барыу, уның буйынса презентация эшләй белеү.
3. Мәҙәни аралашыу оҫталығына, телмәр этикетына эйә булыу, үҙ фекерен яҡлағанда уй-тойғоларын еткерә алырлыҡ аныҡ, эҙмә-эҙ бәйән итеү,

әңгәмәсенең уй-тойғоларын аңларға тырышыу, уның менән иҫәпләшә һәм уртаҡ фекергә килә белеү.

4. Үҙ фекереңде аңлата, раҫлай, дәлилләй белеү.
5. Парҙарҙа һәм төркөмдәрҙә эшләй белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре.**

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү.
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү.
3. Шиғырҙарҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
4. Уҡығандың йөкмәткеһен еткерә белеү, үҙ мөнәсәбәтеңде белдереү.
5. Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм дәрестә шулар тураһында фекер алышыу .
6. Географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү.
7. Билдәле кимәлдә башҡорт теленең лексик-фразеологик минимумын үҙләштереү һәм телмәрҙә ҡуллана белеү.

**Дәрестән тыш эшмәкәрлектең уҡыу планындағы урыны.** Дәрестән тыш эшмәкәрлектең программаһы 8-9 кластарҙа 34 сәғәткә иҫәпләнгән (аҙнаһына 1 сәғәт).

**Метод, алымдар.**

- Уҡытыусы һүҙе
- Әңгәмә
- Эҙләнеү
- Уйын
- Күргәҙмә материал ҡулланыу

- Экскурсия
- ИКТ
- Викторина
- Сәйәхәт
- Сығыштар яһау.

**Программаның йөкмәткеһе**

Халыҡ ижадына хас булған терминдарҙы үҙләштереү һәм уҡыу процесында ҡулланыу, һөйләү һәм монологик телмәр күнекмәләренә эйә булыу, танып белеү маҡсатын ҡуя белеү. Әкиәттәрҙе сәхнәләштереү, тасуири яттан һөйләй белергә өйрәтеү. Йыр, әкиәт, йомаҡ, мәҡәл-әйтемдәр,таҡмаҡтар, бейеүҙәр, уйындар тураһында мәғлүмәт туплау.

Башҡорт халыҡ йырҙары, йолалары, уйындары, музыка ҡоралдары, милли кейемдәре, биҙәүестәре үҙенсәлектәрен асыҡлау. Башҡорт йыр сәнғәте һәм башҡорт халыҡ йырҙарын, бейеүҙәрен башҡарыусылар тураһында һөйләшеү, фекер алышыу. “Халҡым ынйылары” йомғаҡлау байрамын үткәреү.

.

**Календар-тематик планлаштырыу**

**9 класс**

| № | Дәрес темалары | Сәғәт һаны | Прогр. б-са | Фактик үтәлеш |
|---|---|---|---|---|
| 1. | Художестволы әҙәбиәт - һүҙ сәнғәте. Әҙәби мираҫ | 1 | | |
| 2 | Урал батыр эпосы | 1 | | |
| 3 | Урал батыр эпосы | 1 | | |
| 4 | Урал батыр эпосы | 1 | | |
| 5 | Иҙеүкәй менән Мораҙым | 1 | | |
| 6 | Иҙеүкәй менән Мораҙым | 1 | | |
| 7 | Иҙеүкәй менән Мораҙым | 1 | | |
| 8 | Байыҡ Айҙар сәсән ижады | 1 | | |
| 9 | Байыҡ Айҙар сәсән ижады | 1 | | |
| 10 | Байыҡ Айҙар сәсән ижады | 1 | | |
| 11 | Салауат Юлаев .(фильм ҡарау) | 1 | | |
| 12 | Салауат Юлаев .(фильм ҡарау) | 1 | | |
| 13 | Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу. | 1 | | |
| 14 | Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу. | 1 | | |
| 15 | Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу. | 1 | | |
| 16 | Зөһрә менән Алдар | 1 | | |
| 17 | Зөһрә менән Алдар | 1 | | |
| 18 | Зөһрә менән Алдар | 1 | | |
| 19 | Аҡмулла ижады. | 1 | | |
| 20 | Аҡмулла ижады | 1 | | |
| 21 | М.Өмөтбаев ижады | 1 | | |
| 22 | Р.Фәхретдин ижады | 1 | | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 23 | М.Ғафури “Ярлылар,йәки өйҙәш ҡатын” | 1 | | |
| 24 | М.Ғафури “Ярлылар,йәки өйҙәш ҡатын” | 1 | | |
| 25 | М.Ғафури “Ярлылар,йәки өйҙәш ҡатын” | 1 | | |
| 26 | М.Ғафури “Ярлылар,йәки өйҙәш ҡатын” | 1 | | |
| 27 | Ш.Бабич (фильм ҡарау) | 1 | | |
| 28 | Ш.Бабич (филь ҡарау) | 1 | | |
| 29 | Ш.Бабич (фильм ҡарау) | 1 | | |
| 30 | Беренсе республика (филь ҡарау) | 1 | | |
| 31 | Беренсе республика (филь ҡарау) | 1 | | |
| 32 | Беренсе республика (филь ҡарау) | 1 | | |
| 33 | Беренсе республика (филь ҡарау) | 1 | | |
| 34 | Йомғаҡлау. | 1 | | |